Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теле буйынса Аҡмулла олимпиадаһының был турында текст буйынса эш тәҡдим ителә. Бирелгән тексты иғтибар менән уҡып сыҡҡандан һуң 20 һорауға яуап бирергә кәрәк буласаҡ, улар өс өлөшкә бүленә. 1-се (А) өлөшөндә һайланма яуаптар менән тест тәҡдим ителә. Был теста 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан 1 дөрөҫ вариантты һайлап, һеҙ яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа тамға ҡуйырға тейеш булаһығыҙ.

2-се (В) өлөшөндә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк була.

3-сө (С) өлөшөндә һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар бирергә кәрәк буласаҡ, был яуаптар һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын.

Принтерҙан сығарып алған яуаптар бланкыһында үҙегеҙ тураһында мәғлүмәтте, һорауҙарға яуаптарҙы тултырғандан һуң, был бланкыны сканер аша үткәреп (бик булмағанда фотоға төшөрөп), электрон вариантын сайтҡа элергә тейеш булаһығыҙ. Сканкопияғыҙ (фотокопияғыҙ) бик асыҡ, таҙа һәм уҡымлы булһын. Уңыштар һеҙгә!

**Текст**

(1) Беҙ бер төркөм балалар менән ауыл эргәһендәге тау башына мендек. (2) Был тауҙы Йылайыр һыуы урап үтә лә Мәксүттең икенсе яғына килеп сыға. (3) Тау башынан байтаҡ ерҙәге түбәләр, аралыҡтар, ҡаялар күренә. (4) Шуларҙың һәр береһенең исеме генә түгел, легендаһы йәки тарихы бар. (5) Ҙурыраҡ балалар, бер-береһенең һүҙен төҙәтә-төҙәтә, ул легендаларҙы һөйләп тә бирҙеләр. (6) Быуаттар төпкөлөнән килгән был хикәйәләрҙә ғәҙеллеккә, батырлыҡҡа, азатлыҡҡа күпме маҡтау йырлана! (7) Шундай данлыҡлы ерҙә тыуып үҫеүҙәре менән балалар бик ғорур ине.

(8) Тау итәген төшкәс, балалар йүгерә-атлай сәскә йыйырға тотоналар. (9) «Сәскә араһында йәшәп тә, сәскә менән шул тиклем мауығалармы икән ни? — тип уйлап ҡуйҙым. (10) — Хатта малайҙары ла... » (11) Сәскәле ялан буйлап беҙ зыярат эргәһенә килеп еттек, һәм ҡапыл балалар төрлөһө төрлө ерҙән зыярат кәртәһенә үрмәләргә тотондо. (12) Мин шунда ғына баяғы сәскәләрҙең кемдәр өсөн өҙөлөүен аңланым. (13) Был кәртә аръяғында бит күбеһенең олатайҙары һәм өләсәйҙәре ята. (14) Улар эргәһенән балалар ғәмһеҙ генә үтеп китә алманылар, ҡәберҙәргә сәскәләр һалып сыҡтылар. (15) Тимәк, шулай өйрәтелгәндәр улар.

(16) Мин был яҙмаларымды күңелһеҙерәк урында, зыярат эргәһендә тамамлайым. (17) Әммә халыҡтың быуындан быуынға күсеп килгән нескә һәм үлемһеҙ рухы тураһындағы яҡты уйҙар менән тамамлайым мин уларҙы.

(Мостай Кәрим)

# 1-се өлөш

Был өлөштә 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан бер генә дөрөҫ вариантты һайлағыҙ

**A1 2-се һөйләмдә алмаштың төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Билдәһеҙлек алмашы
2. Зат алмашы
3. Билдәләү алмашы
4. Күрһәтеү алмашы

**A2 12-се һөйләмдәге *өҙөлөүен* һүҙе ҡайһы юлда ялғауҙарға дөрөҫ бүленгән:**

1. *Өҙөлөү-ен*
2. *Өҙөл-өүен*
3. *Өҙ-өл-өү-е-н*
4. *Өҙ-өлөүен*

**A3 12-се һөйләмдә бирелгән исем ҡылымдың йүнәлешен билдәләгеҙ**

1. Төп йүнәлеш
2. Төшөм йүнәлеше
3. Ҡайтым йүнәлеше
4. Йөкмәтеү йүнәлеше

**A4 6-сы һөйләм составы буйынса ниндәй төргә ҡарай?**

1. Ике составлы һөйләм
2. Билдәле эйәле һөйләм
3. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
4. Эйәһеҙ һөйләм

**A5 15-се һөйләмдә эйә ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән**

1. Эйәһе юҡ
2. Исемдән
3. Сифаттан
4. Алмаштан

**A6 8-се һөйләмдә хәбәр ниндәй заманда тора?**

1. Үткән заман
2. Киләсәк заман
3. Хәҙерге заман
4. Заман менән үҙгәрмәй

**A7 14-се һөйләмдә *сәскәләр* тигән һүҙ ниндәй килештә тора?**

1. Төп килеш
2. Төбәү килеш
3. Төшөм килеш
4. Сығанаҡ килеш

**A8 5-се һөйләмдә сифаттың дәрәжәһен билдәләгеҙ**

1. Төп дәрәжә
2. Артыҡлыҡ дәрәжәһе
3. Аҙһытыу дәрәжәһе
4. Сағыштырыу дәрәжәһе

**A9 14-се һөйләмдә *ғәмһеҙ* һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнән?**

1. Сифат
2. Рәүеш
3. Исем
4. Ҡылым

**A10 11-се һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ**

1. Ябай һөйләм
2. Эйәртеүле ҡушма һөйләм
3. Теркәһесле теҙмә ҡушма һөйләм
4. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм

# 2-се өлөш

Был өлөштә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирегеҙ

**B1 6-сы һөйләмдә һүҙҙәрҙең һүҙьяһалыш юлдарын билдәләгеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | ғәҙеллек | А | Ялғау ҡушыу юлы |
| 2 | батырлыҡ | Б | Һүҙҙәр ҡушыу юлы |
| 3 | йырлана | В | Мәғәнә күсеше |
| 4 | төпкөл | Г | Яһалма һүҙ түгел |

**B2 16-сы һөйләмгә ярашлы һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Мин | А | яҙмаларымды |
| 2 | был | Б | тамамлайым |
| 3 | яҙмаларымды | В | эргәһендә |
| 4 | зыярат | Г | урында |

**B3 Тәүге дүрт һөйләмдә ниндәй ярҙамсы һүҙҙәрҙе күрәһегеҙ?**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | 1-се һөйләмдә | А | теркәүес |
| 2 | 2-се һөйләмдә | Б | бәйләүес |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 3 | 3-сө һөйләмдә | В | киҫәксә |
| 4 | 4-се һөйләмдә | Г | ымлыҡ |

**B4 3-сө, 4-се, 5-се, 6-сы һөйләмдәрҙә өтөрҙәрҙең ҡуйылышын аңлатығыҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | 3-сө һөйләмдә | А | Айырымланған хәл әйтеме |
| 2 | 4-се һөйләмдә | Б | Тиң киҫәктәр |
| 3 | 5-се һөйләмдә | В | Инеш һүҙ |
| 4 | 6-сы һөйләмдә | Г | Кире хәл |

**B5 Тәүге өс һөйләмдә сифаттарҙың мәғәнәләрен билдәләгеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | төркөм | А | Күләме яғынан билдәһен |
| 2 | эргәһендәге | Б | Урынға мөнәсәбәтен |
| 3 | байтаҡ | В | Ваҡытҡа мөнәсәбәтен |
| 4 | ерҙәге | Г | Сифат түгел |

**B6 Текста ҡулланылған һүҙҙәрҙе мәғәнәләре менән тап килтерегеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | итәк | А | Үлгән кешеләрҙе күмә торған урын |
| 2 | түбә | Б | Тауҙың аҫҡы өлөшө |
| 3 | зыярат | В | Тауҙың иң өҫкө өлөшө |
| 4 | аралыҡ | Г | Тауҙар араһындағы буш урын |

# 3-сө өлөш

Һорауҙарҙы уҡығыҙ һәм яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа өлгөгә ярашлы яуаптарын яҙығыҙ. Яуаптарығыҙ һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын

**C1** Данлыҡлы ерҙә тыуып үҫеүҙәре менән балалар ниндәй тойғо кисерә?

**C2** Текста балаларҙың ниндәй сифаттары тасуирлана?

**C3** Ялғауҙарҙың береһендә [у], [ү] өнө урын алһа, артабан ирен гармонияһы һаҡланмай. Был ҡағиҙә текстағы ниндәй һүҙгә тап килә?

**C4** ***Ғәҙеллек*** һүҙенең синонимдарын яҙығыҙ.

М. Акмулла исемендәге БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ

Аҡмулла олимпиадаһы

Ҡатнаш. Уҡы. Еҥ!

# Яуаптар бланкыһы

*Иғтибар! Ҡара гель ручка менән өлгөгә ярашлы тултырығыҙ:*

А Б В Г Ғ Д Ҙ Е Ж З И Й К Ҡ Л М Н Ң О Ө П Р С Ҫ Т У Ү Ф Х Һ Ц Ч Ш Щ Ъ Ы Ь Э Ә Ю Я 1 2 3 4 5 6 7 8 9 0

*Уҡыусы уҡыған ҡала, район, ауыл, мәктәп, класс:*

*Фамилияһы*

*Исеме*

*Атаһының исеме*

*Уҡытыусыһының фамилияһы, исеме*

## A. *Һайланма яуаптар.* *Өлгө:* ☒

| | A1 | A2 | A3 | A4 | A5 | A6 | A7 | A8 | A9 | A10 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ |
| 2 | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ |
| 3 | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ |
| 4 | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ | ☐ |

*Төҙәтмәләр*

| A | A | A |
|---|---|---|
| 1 ☐ | 1 ☐ | 1 ☐ |
| 2 ☐ | 2 ☐ | 2 ☐ |
| 3 ☐ | 3 ☐ | 3 ☐ |
| 4 ☐ | 4 ☐ | 4 ☐ |

## B. *Яраштырма яуаптар.* *Өлгө:* B0 1 А 2 Б 3 В 4 Г

B1 B3 B5

B2 B4 B6

*Төҙәтмәләр*

B B B

## C. *Ҡыҫҡа яҙма яуаптар.* *Өлгө:* C0 У Ң Ы Ш Т А Р Һ Е З Г Ә !

C1 C3

C2 C4

*Төҙәтмәләр*

C C